■ Шәхестәребеҙ

# ХӘҠИҠӘТ



**Үҙемдең иң яҡшы килешеүемде мин Аллаһ менән төҙөнөм - АҠШ эшҡыуарының фекере.**

Ҡөръәндә Аллаһы Тәғәләнең теләгән ҡолон Үҙе хаҡ юлға төшөрөүе тураһында әйтелә. Бер Америка эшҡыуары менән дә шундай хәл була. Ул Мәккәгә сауҙа эшен атҡарыу өсөн юллана, ләкин ошо сәфәр яҙмышын ҡапыл үҙгәртеп ебәререн башына ла килтермәй.

Ричард Паттерсон Сәғүд Ғәрәбстанында бер нисә ай тороп. бындағы халыҡтың асыҡ, ихлас булыуына иҫе китә, ахыр ул Ислам динен ҡабул итә, үҙенә Абдулғәзиз тигән исем ала.

Паттерсондың медицина ярҙамы, реабилитация хеҙмәте буйынса бер нисә кампаниеһы бар. Шулай уҡ табип ярҙамы күрһәтеү өсөн ике самолет һәм ике вертолет тота. Йүнселдең капиталы 50 миллион тәшкил итә. Урындағы Ярым ай ойошмаһы саҡырыуы буйынса Сәғүд иленә контракт төҙөргә тип килгән сағында дин эштәре буйынса министрлыҡтың өс хеҙмәткәре уны ҡунаҡҡа саҡыра. Был кешеләр "Мине Исламға алып кил" тигән проект өҫтөндә эшләгән булалар, улар ҡунаҡҡа ла диндең асылын аңлаталар.

"Был илгә сауҙа килешеүе төҙөргә тип килгәйнем, йәмғиәттәге дини рух шул тиклем тәьҫир итте. Мин Исламды ҡабул иттем, был минең тормошомдағы иң яҡшы килешеү - сөнки ул Аллаһы Тәғәлә менән килешеү", - тип әйтте Абдулғәзиз Исламды ҡабул итеү йолаһын атҡарған саҡта.

Уның әйтеүенсә, матбуғат сараларында хаҡ дин тураһында тик алама хәбәрҙәр генә баҫыла. Ислам тураһында уҡыу ғына аҙ, уны аңларға кәрәк, диндең асылын ошо рухты йөрөткәндәр генә сағылдыра ала, ти ул. Абдулғәзиз үҙенең мосолман дуҫтарына бик рәхмәтле, сөнки ғәрәп иле уға Исламдың дуҫлыҡ, изгелек дине икәнен аңларға ярҙам итә. Сәғүд йәмғиәтендәге динилек ифрата бик оҡшай. "Үҙемдең һөнәрҙәштәремле лә бында алып килер инем, уларҙың да ҡарашы ҡырҡа үҙгәрер ине", ти ул.

Абдулғәзиз мосолман эшҡыуарҙарының һәр яҡлап та үрнәкле булыуҙарын теләй: "Шул саҡта бүтән кешеләр мосолман булырға тырышасаҡтар". Ул йәнә лә бизнес-конференцияларҙа, эшлекле осрашыу-сараларҙа дин мәғлүмәт биргән китаптар таратыу зарурлығын әйтә: Паттерсондың тәржемәсеһе, мөғәллим Эсам Абдул Разаҡ шулай ти: "Уңыш ҡаҙанғандарға нығыраҡ ышаналар, сөнки уларҙы йәмғиәттең әһәмиәтле кешеләре, тип таныйҙар. Ундайҙар Исламды ҡабул итһә, бүтәндәрҙә лә ҡыҙыҡһыныу уяна, һәм үҙ сиратында, улар был дин тураһында күберәк белергә тырышалар".

## КӨН ХӘҘИСЕ

Аллаһтың Рәсүле шулай тигән: "Кем ике ҡыҙ, йәки ҡыҙ туғанын, йә әсәһенең апаһын, йә атаһының апаһын, йәки ҡартәсәһен (өләсәһен) ҡарай, шул кеше Йәннәттә минең менән бергә буласаҡ. Ә кем әле мин һанағандарҙың өсәүһен баға - ул ҡотоласаҡ һәм уңышҡа ирешәсәк. Ә кем мин һанағандарҙың дүртәүһен йәки бишәүһен аҫырай, эй, кешеләр, уның һымаҡ булығыҙ!" ***Әбү әл-Мөхбир тапшырғанды Ат-Табарани яҙып ҡалдырған.***

# БЕЙЕКЛЕККӘ ЮЛ

Бер көн Мансур хәлифте себен тешләй. Бик асыуланып, ул күренекле дини ғалим Йәғәфәр әс-Садиҡҡа мөрәжәғәт итә:

- Эй, Абдулла улы! Ни өсөн Алла себенде булдырған?

Имам Йәғәфәр былай тип яуап бирә:

- Мин-минлектәре артыҡ ҙурайып киткәндәргә үҙ урынын күрһәтер өсөн!

Бер билдәле яҙыусының уның шәхси автомобиле булыу-булмауы тураһында һорағандар. "Эйе, мин унда һуңғы юлымда барасаҡмын", - тип яуап бирә ул ныҡлы ышаныс менән

* * *

Зәйнул-Аби-д-Дин бер мәл йыуынған сағында ағарынып китә. Унан ни булды, тип һораһалар, аҡыл эйәһе шулай тип яуап бирә: "Әгәр ҙә һеҙ хәҙер минең Кем алдына барып баҫасағымды бөтә тәрәнлегендә күҙ алдына килтерһәгеҙ, минең хәлемде аңлар инегеҙ!".

* * *

Әбү-Һөрәйрәнән (раҙыяллаһу ғәнһү) һорағандар:

- Иртәгә үлерегеҙҙе белһәгеҙ, нимә эшләр инегеҙ?

- Мин белем алыуымды дауам итер инем, - ти ул артыҡ күп уйлап тормайынса.

Бер фәйләсуфтан һорағандар:

- Был донъяла нимәгә эйә булыу иң еңеле?

- Хыялға. Сөнки ул һәммәбеҙҙә лә бар.

- Был донъяла иң ҡатмарлыһы нимә?

Ул былай тип яуап биргән: "Һүҙ. Сөнки уны ҡайһы саҡ аңлауы бик ауыр, һәм шулай уҡ аңлатыуы ла...".

* * *

"Мин үлемдән ҡурҡам, шуға ла уны яратмайым", - тигән кешегә Хәсән Басрый былай тип әйткән: "Һин уны үҙеңдән һуң байлығыңды ҡалдырырға тейеш булғаның өсөн яратмайһың. Әгәр байлығың һинән алда барһа, һин уның артынан сабыр инең".

Бер көн иманлы Рабиғанан (раҙыллаһу ғәнһү) һорағандар:

- Кешенең Аллаһы Тәғәләнең Ихтыяры менән ҡәнәғәтме-түгелме икәнлеген нисек белергә, ул Хаҡ Тәғәлә ебәргәндәр менән ҡәнәғәтме?

Ул былай тип яуап биргән:

- Кешегә ҡыуаныстар һәм бәләләр килгәндә генә быны асыҡ белергә була: шатлыҡ мәлендә кеше Хаҡ Тәғәләгә рәхмәт белдерә, ҡыйғылы мәлендә - күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, ә үҙе кисергән хәлдәрҙән фәһем-һабаҡ ала.

* * *

Бер көн Сәғәҙей Ширазиҙан һорайҙар:

- Нимә ул кеше?

Уның яуабы:

- Бер тамсы ҡан һәм мең төрлө икеләнеү.

* * *

Бер ғалимдан ҡайҙан белем алыуы тураһында һорағандар икән, ул:

- Һуҡырҙарҙан, сөнки алда ни булғанын тикшермәй тороп, улар бер аҙым да атламай, - тип яуап биргән.

* * *

Абу Дарда (раҙыяллаһу ғәнһү) ярлылыҡҡа зарланған ҡатынынан: "Түҙ, беҙҙең алда әле шундай бейеклек буласаҡ, ә унда йөгө ауыр булмағандар ғына менә ала", - тигән.

## Тәрән фекер

Йыйылышып, нимә тураһындалыр ҡыҙыу гәпләшкән ирҙәр янынан хикмәт эйәһе лә килеп ултыра. Шунда кемеһелер ғаилә, өйләнешеү тураһында һүҙ сығарып шулай ти: "ҡатындарҙы мин аяҡ кейеме менән сағыштырам. Үҙенә тиң йәрҙе тапҡанға тиклем ир кешенең уларҙы алмаштырып торорға хаҡы бар".

Ҡалғанлар уның был һүҙенә аптырап ҡалалар, шунан инде был турала аҡһаҡалдың фекерен белешәләр.

"Тулы дөрөҫлөк уның әйткәнендә, - тип йылмая хикмәт эйәһе һәм сал һаҡалын һыйпай-һыйпай һүҙен дауам итә: - Ысынлап та, ҡатын аяҡ кейеменә бәрәбәр... Беләһегеҙме, кемдәр өсөн? Үҙен табан тип иҫәпләгәндәр өсөн. Ә инде үҙен баш тип һанаған ирҙең башында ул фәҡәт таж ғына буласаҡ!"

***"Кеше беҙҙән үҙенең намаҙҙарын һәм ураҙаһын йәшерә ала. Ләкин ғилем туплаймы-юҡмы, быныһын ул йәшерә алмай... Сөнки Аллаһы Тәғәлә кешенең бүтәндәр өҫтөнән дәрәжәһен тап ғилем аша күтәрә йәки төшөрә".***

Сыңғыҙ Әбү Салиха.

■ Шиғриәт

**Рафаэль САФИН**

*Аҡтарылған, күтәрелгән*
*илдә февраль бураны.*
*Мин тыуғанмын күҙ асҡыһыҙ*
*аҡ буранға уранып.*

*Уйлағандыр әсәкәйем*
*шөбһәлеһен дә уйҙың:*
*"Хәйерлегә генә булһын,*
*буранлы көндә тыуҙың".*

*Теләгәндер теләктәрҙең*
*иң ағын - изгеләрен.*
*Бик бәхетле бала итеп*
*килгәндер күргеләре.*

*Аяҡ-ҡулдары һыҙлауһыҙ*
*булһын, тип теләгәндер.*
*Үҫеп, ир еткәс бисәнән*
*уңһын, тип теләгәндер.*

*Теләгәндер, тормошҡайы*
*буранлы булмаһын, тип,*
*шатлыҡ ҡына, шатлыҡ ҡына*
*биҙәһен донъяһын, тип.*

*Ҡабул булһын теләгем, тип*
*Хоҙайҙан һорағандыр.*
*Буран ғына теләктәрен*
*кирегә юрағандыр...*

*Аҡтарылған, күтәрелгән*
*илдә февраль бураны.*
*Йыл артынан йылдар тыуған*
*аҡ буранға уранып.*

*Буран тынған, күҙ асылған,*
*зәңгәр күк ил өҫтөндә.*
*Минең генә йәнем һаман*
*аҡ бурандар эсендә.*



# ТӘҮБӘ - гонаһтарҙан арындыра

Был тормошта, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бер кем дә хаталаныуҙан азат түгел. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһын хаталары менән бар иткән. Әммә мосолман Хоҙайҙың уның барса уйын, ғәмәлен күреп тороуын белә. Шуның өсөн Раббыһына тәүбә, истиғфар ҡылырға ашыға. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм дә: "Әҙәм балаһының һәммәһе лә хаталаныр. Хата эшләүсенең иң хәйерлеһе - тәүбә итеүселер", - тип әйткән. Тәүбә - хатанан, гонаһтан ҡайтыу, ҡылынған гонаһтар өсөн Аллаһы Тәғәләнән ғәфү итеүҙе һорау.

Тәүбә итеү мосолмандарға фарыз ҡылынған. "Тәһрим" сүрәһенең 8-се аятында: "Эй, иман килтергән бәндәләрем, Аллаһыға ихлас күңел менән тәүбә итегеҙ", - тип әйтелә.

Тәүбә әҙәм балаһының күңелен гонаһтарҙан сафландыра, уға ҡотолоу алып килә. Тәүбә иткән кеше йәнен нур эсенә һалыр, күңеленә тыныслыҡ табыр, Хоҙайға яҡынайыр. Раббыбыҙҙың рәхмәте киң. Ул әҙәм балаларына миһырбанлы, уларҙы ғәфү итер өсөн һәр ваҡыт әҙер.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм дә тәүбә хаҡында: "Кем даими рәүештә тәүбә итә, Аллаһы Тәғәлә ул бәндәгә төрлө ауырлыҡтарҙан ҡотҡара торған юлды күрһәтер һәм дә ул бәндәне хисапһыҙ ризыҡландырыр", - тигән.

### ЙӘҺӘННӘМДӘН ҠУРҠ, ӘҘӘМ!

Бер сәхәбә, бик ҡаты сирләп, төш күрә икән. Төшөндә күркәм ҡиәфәтле егет уға: "Ниңә илайһың, Мин үлем фәрештәһе, ләкин әле һинең йәнеңде алыу өсөн бойоролманым", - тигән. Сәхәбә: "Гонаһтарымды иҫкә төшөрөп, йәһәннәм утынан ҡурҡамын", - тип яуаплаған.

Егет унан: "Мин һиңә йәһәннәм утынан ҡотола торған нәмәне өйрәтәйемме?" - тип һорағас, сәхәбә: "Өйрәт", - тигән.

Егет "Бисмилла"ны яҙып, ҡағыҙҙы тултырып "Әстәғәфируллаһ" һүҙҙәрен яҙған. Сәхәбә, аптырап: "Ҡайҙа бында уттан ҡотолдора торған нәмә?" - тип һорағас, егет: "Оло уттан ҡотолдора торған ошонан да оло әйбер юҡ", - тигән.

Йоҡоһонан уянғас, сәхәбә шул яҙылған ҡағыҙҙы ҡулында күрә. Әбү Күләбә: "Бер төшөмдә үҙемде ҡәберстанда күрҙем. Барса ҡәберҙәр ярылып, мәйеттәрҙең сыҡҡанын һәм ҡәбер ситтәренә ултырғанын күрҙем. Мәйеттәрҙең алдында нурҙан булған табаҡтар бар ине. Әммә бер ир алдында ундай табаҡ юҡ. Был ир: "Башҡаларҙың балалары һәм дуҫтары, туғандары улар өсөн доға ҡыла һәм саҙаҡалар бирә.

Ошо изгелектәр уларға нур булып ҡайта. Минең балам ундай түгел, ул минең өсөн доға ла ҡылмай, саҙаҡа ла бирмәй - шуның өсөн күршеләрҙән ғәрләнәм", - тип һөйләй. Әбү Күләбә уянғас, теге мәйеттең улын табып, ошо хәбәрҙе еткерә. Мәрхүмдең улы, ғәжәпләнеп: "Башҡа ул яман юлға баҫмам", - тип тәүбә ҡыла һәм атаһы өсөн доғалар ҡылып, саҙаҡалар биреп йәшәй башлай.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, Әбү Күләбә төшөндә тағы шул ҡәберстанды күрә. Теге ирҙең алдындағы нуры ҡояштан да яҡтыраҡ һәм олораҡ була. "Аллаһының хәйерле рәхмәте булһын һиңә, Күләбә", - тип, ир рәхмәттәр уҡый. "Һинең һүҙен менән улым тәүбә итеп, йәһәннәм утынан һаҡланды һәм мин дә күршеләремдең алдында оятҡа ҡалманым.

Аллаға шөкөр", - тип һөйөнә. Был риүәйәттән күренеүенсә, әҙәм балаһына ваҡытында тәүбә итеү зарур.